# «Мин уҡырға өйрәнәм».



copyright (c) 2003. 4. woojoosun project. All rights reserved.

Иғтибар менән у



һорауҙарға яуап бирергә

әҙерлән.



3

Һандуғас - йырсы ҡош. Ул ҡыуаҡ араһында йәшәй. Һандуғас матур һайрай. Уның моңон халыҡ хайран ҡалып тыңлай.

# Һандуғас ниндәй ҡош?

**Йырсы ҡош.**

**Көслө ҡош.**

**Ҡышлаусы ҡош.**

copyright (c) 2003. 4. woojoosun project. All rights reserved.



**Тексты иғтибар менән тағы бер тапҡыр уҡып сыҡ !**



**Молодец! Туҡтап ҡалма, артабан уҡы!**

3

Зилә уҡый-яҙа белә. Ул Сабирға хат яҙҙы. Сабир хатты алды. Ул шатланды. Сабир Зиләгә яуап яҙҙы.

# Зилә кемгә хат яҙҙы?

**Сәлимгә**

**Саматҡа**

**Сабирға**

copyright (c) 2003. 4. woojoosun project. All rights reserved.



**Тексты иғтибар менән ҡабаттан уҡып сыҡ!**



**Афарин! Артабан уқы!**

3

Көндәр оҙайҙы. Ҡояш
нығыраҡ йылыта башланы.
Йылы яҡтан ҡоштар ҡайта.
Улар оя ҡора. Тиҙҙән
ҡошсоҡтары ла күренер.

# Ниндәй миҙгел тураһында һүҙ бара?

**Көҙ.**

**Яҙ.**

**Йәй.**

copyright (c) 2003, 4, woojoosun project, All rights reserved.



**Тексты ҡабаттан уҡып ҡара!**



**Молодец! Артабан уқы !**

3

Өфө – баш ҡала.

Өфө – беҙҙең баш ҡалабыҙ. Ул ҙур. Унда завод һәм фабрика-лар бар. Бейек йорттар күп. Өфө – матур ҡала.

# Өфөлә нимәләр бар?

**Завод, фабрикалар.**

**Магазиндар.**

**Театрҙар.**

copyright (c) 2003. 4. woojoosun project. All rights reserved.



**Тексты иғтибар менән ҡабат уҡы!**



**Афарин! Артабан укы!**

3

**Самат.**

Самат ҙур үҫте. Ул мәктәпкә уҡырға йөрөй. Самат яҡшы уҡый. Өйҙә ул әсәһе менән атаһына булыша. Буш ваҡытта уйнарға сыға. Уның дуҫтары күп.

# Текст кем тураһында?

**Сабит.**

**Сәлимә.**

**Самат.**

copyright (c) 2003. 4. woojoosun project. All rights reserved.



**Ҡабаттан иғтибар менән уҡып сыҡ!**



**Молодец! Артабан уқы!**

3

Тауға сыҡтыҡ.

Ял көнө беҙ тауға сыҡтыҡ. Көн матур, йылы. Малайҙар саңғыла ярышты. Ҡыҙҙар сана шыуҙы. Бәләкәй Әлим менән Нәсимә Ҡарбабай яһаны. Беҙ кис кенә ҡайттыҡ.

# Кемдәр Ҡарбабай яһаны?

**Малайҙар**

**Әлим менән Нәсимә**

**Ҡыҙҙар**

copyright (c) 2003. 4. woojoosun project. All rights reserved.



**Тукта! Ҡабаттан укы!**



**Афарин! Артабан уқы!**

3

**Йомарт алмағас.**

Урманда ҙур алмағас үҫкән.Бер саҡ уның янынан терпе үтеп барған. Бер алма терпенең арҡаһына төшкән. Терпе уны алып ҡайтҡан. Балалары алманы бик яратҡан.

# Терпе балаларына нимә алып кайткан?

**Алмагас.**

**Балан.**

**Алма.**

copyright (c) 2003, 4, woojoosun project, All rights reserved,



**Тексты ҡабаттан уҡып сыҡ!**



**Молодец! Артабан уҡы!**

3

**Баҡсала.**

Беҙҙең баҡса бар. Ул ҙур һәм матур. Баҡсала сәскәләр үҫә. Улар аҡ, ҡыҙыл күк төҫтә. Сәскәләргә бал ҡорттары, күбәләктәр ҡуна. Унда күңелле. Мин баҡсала эшләргә яратам.

# Баҡсала ниндәй сәскәләр үҫә?

**Аҡ, ҡыҙыл, күк.**

**Һары, күк, көрән.**

**Ал, аҡ, күк.**

copyright (c) 2003. 4. woojoosun project. All rights reserved.



**Тексты ҡабаттан уҡып сыҡ**



**Молодец! Артабан уқы!**

# Төймә.

Ғәзимә быйыл уҡырға төштө. Көн һайын иртүк тора ла мәктәпкә йүгерә. Ләкин бөгөн дәрескә һуңға ҡалды.

Кейенеп алғас, курткаһының ике төймәһе юҡлығын күреп ҡалды. Кисә урамда уйнағанда төшкәйне төймәләре. Мәктәпкә төймәһеҙ барып булмай бит инде.

Эй ултырҙы Ғәзимә төймә тағып, эй ултырҙы. Ҡалай ауыр икән төймә тағыуы! Аптырағас төймәләрен атып бәрҙе лә мәктәпкә йүгерҙе. Ләкин дәрескә һуңлағайны инде.

Ф.Туғыҙбаева.

# Ғәзимә ни өсөн дәрескә һуңланы?

**Йоҡлап ҡалған.**

**Кистән кейемдәрен әҙерләмәгән.**

**Өйгә эшен эшләмәгән.**

copyright (c) 2003, 4, woojoosun project, All rights reserved.



**Тексты ҡабаттан уҡып сыҡ!**



**Афарин!!!**